*Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА,*
*Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге*
*2-се республика башҡорт гимназияһы*
*директоры*



# МАҠСАТЫБЫҘ – ШӘХЕС ТӘРБИӘЛӘҮ

Баланың шәхес булараҡ үҫешенең күп өлөшө мәктәптә уҡыу осорона тура килә. Шуға күрә беҙ, киләсәктә йәмғиәтебеҙҙең алдынғы булыуын теләһәк, бөгөнгө йәштәребеҙҙең, мәктәп уҡыусыларының шәхес булып формалашыу шарттарын камиллаштырырға, яңыса ҡорорға тейешбеҙ. Ошо ҡараштан сығып ойошторолған гимназия-лицейҙарҙа, яңы төрҙәге уҡыу йорттарында заманса уҡытыу ниндәй принциптарға нигеҙләнә һуң?

Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се республика башҡорт гимназияһында уҡытыу һәм тәрбиәләү процесы өс нигеҙгә ҡоролған:

— баланы халҡыбыҙҙың тарихи, мәҙәни, рухи мөхитендә, туған телендә тәрбиәләү;

— баланың тәбиғәттән бирелгән күп яҡлы һәләтен асыу һәм үҫтереү;

— баланың киләсәктә бөтә донъя халыҡтары менән дә аралашыу мөмкинселеген булдырыу.

Хәҙерге заман шарттарында үҙен иркен тотҡан, ҡыйынлыҡтарҙы үҙаллы еңеп сығырға әҙер, халҡының, иленең киләсәге өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырлыҡ, белемле, мәҙәниәтле, рухлы шәхес тәрбиәләү — беҙҙең маҡсатыбыҙ.



*Ғәрәп теле уҡытыусыһы*
*Нурмөхәмәт Әлибай улы Сөйәрғолов*

Гимназия республикабыҙҙа ойошторолған иң тәүге милли инновацион мәктәптәр рәтендә тора. 1992 йылдың авгусында асылғандан алып, һигеҙ йыл эсендә гимназия мауыҡтырғыс үҫеш осорон үтте тип әйтергә була, сөнки бер ниндәй методик әсбаптар ҙа, ғәмәли ҡулланмалар ҙа юҡ ине, бары тик башҡорт халҡының бала тәрбиәләү буйынса аҫыл өлгөләренә һәм үҙебеҙҙең педагогик тәжрибәгә таянып эш башларға тура килде.

Тәүге йылдарҙа башҡорт гимназия-интернатының маҡсаты анығланды, структураһы, эш формалары булдырылды. Йәмәғәтселектең гимназияға ҡарата ышанысы нығынғас, уҡыусылар һаны ла ҡырҡа (2,5-3 тапҡырға) артты. Гимназияға арҙаҡлы яҡташыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди исеме бирелеүе тәрбиәүи, рухи йүнәлештәрҙе билдәләне. Артабан тотороҡло, ижади эшләүсе кадрҙар тупланған коллектив булдырылды. Уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең, йәмәғәтселектең ихтыяждарын иҫәпкә алып, юғары уҡыу йорттары менән ныҡлы бәйләнеш урынлаштырылды. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты, Башҡорт дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты менән килешеү төҙөлдө, гимназияның матди базаһы нығытылды.

Ишембай ҡалаһы мәктәптәре һәм гимназиялары араһында үткәрелгән «Йыл мәктәбе — 98» конкурсында 1-се, Бөтә Рәсәй «Матур мәктәп — 98» конкурсында 2-се урындар яуланыҡ.

Бөгөнгө көндә гимназиябыҙҙа һәр баланың, шулай уҡ һәр уҡытыусының шәхес булараҡ үҫеүе өсөн күп шарттар булдырылған. Беҙҙә белем алырға теләүсе балаларҙың һаны йылдан-йыл арта. Әлеге көндә 17 район һәм ҡаланан, Һамар һәм Төмән өлкәләренән килгән 707 уҡыусы тәрбиәләнә. Сығарылыш синыфтарҙың 95 процентынан артығы йыл һайын юғары уҡыу йорттарына, ҡалғандары техникумдарға инә. 9 уҡыусыбыҙ Көнсығыш илдәренең (Египет, Төркиә, Иордания) университеттарында ғәрәп һәм инглиз телдәрендә белем ала.

Әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә ҡуйылған маҡсатты тормошҡа ашырырлыҡ кадрҙар туплау эшен башҡарырға тура килде.

Бөгөнгө көндә коллективтағы 49 уҡытыусы һәм тәрбиәсенең 8-е юғары, 41-е беренсе һәм икенсе категориялы белгестәр, 3-һе — «Мәғариф алдынғыһы», 2-һе «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы», ә инде ғәрәп теле уҡытыусыһы, аҡһаҡалыбыҙ Нурмөхәмәт Әлибай улы Сөйәрғолов — Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты.

Уҡытыусыларыбыҙ ҡала һәм республика кимәлендә үткәрелгән төрлө маһирлыҡ конкурстарында ҡатнашып, призлы урындарҙы яулай, фәнни һәм фәнни-ғәмәли йүнәлештәге сараларҙа ҡатнаша, матбуғатта сығыш яһай. Гимназия уҡытыусылары ҡатнашлығында бер нисә методик йыйынтыҡ баҫылып сыҡты.

Гимназияның алдынғы эш ысулдарын өйрәнергә төрлө төбәктәрҙән килеүселәр өсөн республика кимәлендәге семинарҙар, кәңәшмәләр үткәрелә.



*Уҡытыусылар коллективы*

Һуңғы йылдарҙа ныҡлы матди-техник база булдырылды — аудио-, видеотехника, компьютерҙар алынды, 180 урынлыҡ интернат, ике ашхана, йәшелсә һаҡлағыс, ярҙамсы хужалыҡ көйлө эшләй. Ә дауахананың стоматология, физиотерапия, фитобар кабинеттарында етерлек кимәлдә медицина ярҙамы күрһәтелә. Был эшкә ҙур иғтибар бирелеүенең сәбәбе — һуңғы йылдарҙа экологик һәм социаль хәлдең ҡырҡыулашыуы арҡаһында уҡыусы балаларҙың һаулығы насарайҙы. Беҙ бөтә уҡытыу процесын эш күләмен арттырыуға түгел, ә тәрәнәйтеү йүнәлешенә ҡорабыҙ, йәғни гимназия-интернатҡа уҡырға килгән һәр бер баланың тәбиғәттән бирелгән һәләттәрен асыҡлап, аныҡ диагностика үткәргәндән һуң, уның артабанғы шәхси үҫеш юлы билдәләнә һәм шул һәләттәр дөйөм интеллектуаль мөмкинлеген үҫтереү өсөн ҡулланыла. Был йәһәттән уҡыу пландарында ҡаралған төп предметтарҙы уҡытыу юғары методик кимәлдә алып барыла. Милли мәктәптәргә хас булған алымдар һәм ысулдар, яңы педагогик технологияларҙы гимназия-интернат шарттарына яраҡлаштырыу, информацион технологияларҙы ҡулланыу — методик маһирлыҡты үҫтереүҙең төп йүнәлештәре. Ошо эштәрҙе ентекләп тормошҡа ашырыуҙа директор урынбаҫарҙары В.Н. Әмированың, Р.В. Сәлимованың, Г.Ш. Дәүләтҡолованың өлөшө ифрат ҙур.

Яңы быуын өсөн эшлекле, алдынғы ҡарашлы шәхестәр тәрбиәләгәндә баланың интеллектын үҫтереү менән бер рәттән уның рухи үҫешен тәьмин итеү бик мөһим. Был йәһәттән «Шәжәрә», «Өләсәйем һандығы», «Ғаиләм — ҡәлғәм», «Зәки Вәлиди эҙенән», «Лидер», «Мәктәбемдең тарихы», «Президент һайлауҙары», «Детсовет» кеүек гимназия кимәлендә тотороҡло үткәрелеп килгән дөйөм саралар ойошторола, егерменән ашыу түңәрәк эшләй. Халҡыбыҙҙың, шул иҫәптән үҫеп килеүсе йәш быуындың иҫ киткес һәләтле икәнен иҫбатлау өсөн бер-нисә түңәрәктең эш һөҙөмтәһен әйтеү ҙә етә: хор коллективы ҡалабыҙҙа алдынғылыҡты бирмәй, йәш рәссамдарыбыҙҙың юғары зауыҡлы эштәре гимназиябыҙҙы биҙәй, ә йәш

шашкасылар командаһы бына инде бишенсе йыл Рәсәй буйынса 1-се, 2-се урындарҙы бирмәй. Өс тапҡыр донъя чемпионкаһы Т. Танһыҡҡужина — беҙҙең ғорурлығыбыҙ. 6-сы синыф уҡыусыһы Абдуллина Олеся үҙ йәштәштәре араһында Рәсәй чемпионкаһы, 2000 йылдың авгусында үткәрелгән Бөтә Азия спорт уйындарында еңеү яуланы.

Йәш журналистарыбыҙҙың очерктары Бөйөк Еңеүҙең 55 йыллығына арналған йыйынтыҡҡа инде.

«Зәки Вәлиди эҙенән» проекты буйынса үткәрелгән төрлө экспедицияларҙың һөҙөмтәләрен күрһәтеп, Дәүләтйәрова Фаягөл менән Йосопов Руслан, Мәскәүҙә үткәрелгән тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең VIII Бөтә Рәсәй конференцияһында ҡатнашып, төрлө дәрәжәләге дүрт диплом алып ҡайтты.

Бөгөнгө уңыштарыбыҙҙы күҙаллағанда, беҙҙең менән хеҙмәттәшлек иткән юғары уҡыу йорттары тураһында әйтмәү мөмкин түгел. Уҡыу-уҡытыу һөҙөмтәләрен билдәләүсе булараҡ, улар төп йүнәлештәрҙе күрһәтеп кенә ҡалмай, ә көндәлек белем биреү, методиканы үстереүҙә лә ярҙам итә. Башҡорт дәүләт университеты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты, Башҡорт дәүләт медицина университеты, Башҡорт дәүләт аграр университеты, Салауат ҡалаһының медицина училищеһы менән ҡоролған килешеүҙәр нигеҙендәге хеҙмәттәшлек ике яҡ өсөн дә файҙалы.

Хәҙерге заман талаптарына ярашлы белем биреүҙең өҫтәлмә сараларын киңәйтеү, ауылдан килеп уҡыған балаларҙың һаулығын нығытыу һәм яйлашыу программаһын тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн интернаттың матди базаһын нығытыу мотлаҡ.

Беҙҙең уҡыусыбыҙ үҙ халҡының бөтә матурлығын, күңел байлығын, рухи ҡиммәттәрен үҙенең йөрәгендә йөрөтөү менән бер рәттән, бөтә кешелектең ҡаҙаныштарын да ҡабул итергә, ер шарының бер нөктәһендә лә юғалып ҡалмайынса, үҙен аҫыл зат итеп күрһәтә белергә тейеш. Ә беҙҙең уҡытыусылар бөтә донъя һоҡланырлыҡ, үҙен иркен, шат тотоп, киләсәккә ышаныслы аҙымдар менән атларлыҡ белемле шәхес тәрбиәләү өсөн бөтә көсөн һала.



*Буласаҡ медиктар шөғөлләнә*